*Рафаэль РӘХИМОВ*

Вәлит — Хәйбулла районының төньяғында, Аҡъяр-Сибай юлы эсендә ятҡан үҙенсәлекле ауылдарҙың береһе. Ул Хәйбулла сиҙәм совхозының Комсомольск бүлексәһенә ҡарай. Билдәле, сиҙәмселәр ауылы булғас, Комсомольскиға төрлө яҡтан төрлө милләт кешеләре килеп тула. Хәҙерге көндә тәүге сиҙәмселәрҙән бик әҙҙәре генә тороп ҡалған.

Ләкин Комсомольск үҙе айырым тема, беҙҙең һүҙ — сиҙәмселәр осоронан бик күпкә алда барлыҡҡа килгән Вәлит тураһында. Элек ауыл ҡарттары, «Ауыл ҡасан барлыҡҡа килде икән?» тигән һорауға: «Ул бик боронғо ауыл, һалыныуына 300-350 йыл самаһы», — ти торғайнылар. Был яуап нигеҙҙә дөрөҫ, ләкин барлыҡ булмышын асып һала тип әйтеп булмай. Ысынлап та, бынан 300-400 йыл элек түңгәүер башҡорттары Ағиҙел—Урал аралығында, унан да алда, монголдар ябырылғанда ла (XIII быуат), монголдарҙан алда ла башҡорттарҙың Ағиҙел — Һаҡмар — Урал — Арал аралығында йәшәгәнлектәре тарихтан билдәле бит. Ул дәүерҙә улар күсмә тормошта, шунан ярым күсмә тормошта йәшәгән. Бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөгәндә, туҡталған ерҙәрендә, ваҡытлыса тирмә ауылдар ҡорғандар, күскән саҡта һүтеп алып киткәндәр, тип аңлата бит тарихсылар.

Хәҙергесә ултыраҡ ауылдар беҙҙең тирәлә һуңғараҡ барлыҡҡа килгән. Вәлит ауылына исем биргән кеше — тарихи шәхес. Уны 1859 йылда уҙғарылған X ревизия материалдарынан табырға мөмкин (Ҡара: Башгосархив. Фонд И-133. Опись 2. Арх. һаны 646). Был материалда Вәлит 5-се һан менән бирелгән. Вәлит Ирғәле улы Ҡыуатов 1860 йылда 75 йәшендә вафат, тиелгән. Тимәк ул 1785 йылда тыуған. Шулай итеп, Вәлит бынан 216 йыл элек тыуған булып сыға. Уларҙың шәжәрәһендә башҡа Вәлит тигән кеше килеп сыҡманы. Ауылға нигеҙҙе ошо Вәлит һалған тип әйтергә тулы нигеҙ бар.

1850 йылғы IX резизияла Вәлит ауылы ошо урында ултырған. Унда бары 19 йорт-хужалыҡта 100-ҙән ашыу кеше көн күргән. Ошо кешеләр һәм уларҙың ата-олаталары 1834 йылғы ревизияла Түңгәүер йортона ҡараған Ҡыуат ауылында көн иткән.1859 йылда Вәлит Ҡыуатовтың ғаиләһе ҙур ғына булған — 16 кешенән торған. Вәлиттең уландары: 1. Шаһиәхмәт, 1854 йылда 30 йәшендә вафат. 2. Хажиәхмәт, 1860 йылда 27 йәшендә вафат. 3. Рәхмәт Вәлитов, 1859 йылда 22 йәштә. 4. Хәсән. 5. Хөсәйен — улар игеҙәктәр, 1859 йылда 18 йәшлек егеттәр. Рәхмәт Вәлитов 1859 йылда 22 йәштә генә булһа ла, ике ҡатын менән йәшәгән. Өлкәне — 35 йәшлек Фатима. Рәхмәттең Шаһиәхмәт тигән ағайы 30 йәшендә генә вафат булғас, уның ғаиләһен тарҡатмай, еңгәһен 3 балаһы менән 18 йәшлек ҡәйнешенә алып бирәләр. Рәхмәттең ҡустылары (үгәй малайҙары): Сибәғәтулла, Шаһингәрәй (ул бала саҡта үлеп ҡала), өсөнсөһө — 7 йәшлек Зәйнулла. Икенсе ҡатыны — Бибигөлъямал Яҡупова. Рәхмәттең Фатиманан ике ҡыҙы, икенсе ҡатынынан Заһиҙулла тигән малайы йәшәгән.

Ул саҡта Вәлиттең ағайы Әлибай ҙа тере булған эле. Исемлектә ул 39-сы һан менән бирелгән, йәғни 39-сы йортто тәшкил иткән. Әлибай Ирғәле улы Ҡыуатов 77 йәшлек отставкалағы зауряд-есаул. Ул заманында, отставкаға сыҡмаҫ борон, Түңгәүер улусы

старшинаһы булып оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән, шулай уҡ байтаҡ йылдар Вәлиттән алыҫ булмаған ерҙә ил сиген һаҡлап ятҡан. Әлибайҙың да ғаиләһе ишле генә. Өлкән улы Ғәбделсәләм, икенсеһе — Ғәбделмалик — указлы мәзин, өсөнсөһө — Әбдерәхмән Иргәлин, унан Ғәбделхалик Иргәлин, Абдулла, Әхәт, Абуталип, Шәйәхмәт һәм Заһиҙа исемле ҡыҙы. Бына ошо 8 малайҙан, ваҡыты килеп еткәс, Вәлит ауылындағы Әлибаевтар таралып китә лә инде. Вәлит менән Әлибайҙың аталары Иргәле. Иргәленең атаһы Ҡыуат Хәсәнов. Ҡыуат Хәсәновтың Иргәленән башҡа тағы ла улдары булыуы билдәле: Нурғәле, Рәхмәтулла, Исҡаҡ, Аблай, Ирбулат. Иргәленән Әлибаевтар һәм Вәлитовтар таралғанлығы әйтелгәйне инде. Нурғәленең Ғөбәйҙулла, Ҡәһәрмән, Ниғәмәтулла, Төхбәтулла, Мөхәммәтәмин атлы уландары донъя көткән.

1859 йылда Ғөбәйҙулланың 66 йәшлек Мөхәммәтйәр исемле, 55 йәшлек Мостафа исемле улдары була. Мөхәммәтйәрҙең Исмәғил һәм Мөхәммәтғәле тигән уландары Ғөбәйҙуллин фамилияһын йөрөткән. Уларҙың вариҫтары Ғөбәйҙуллин фамилияһын дауам итәләр булһа кәрәк, сөнки хәҙер ҙә Вәлиттә ошо фамилиялы кешеләр осраштырғылай.

Нурғәленең Ҡәһәрмән Ҡыуатов тигән уланы 1853 йылда 71 йәшендә вафат, тере саҡта зауряд-хорунжий булып хеҙмәт иткән.Ҡәһәрмәндең уландары дүртәү: Сафиәхмәт, Мозафар, Ҡәнзәфәр һәм Ғилман. Уларҙың фамилияһы Нурғәлин. Нурғәленең Ниғмәтулла тигән улының Фазулла һәм Муса тигән улдары Ниғмәтуллин фамилияһын һайлаһалар, Ғөзәйер менән Мәхмүте Нурғәлин фамилияһын үҙ иткәндер, күрәһең.

Нурғәленең Төхбәтулла тигән улының да балалары күп: Яҡуп, Утарбай (1859 йылда 30 йәшлек зауряд-хорунжий), Мөхәммәтмәғзүм, Ғәбделлатиф (Аплатиф), Солтанғәле, Мырҙағәле, Солтанғәлим. Улар барыһы ла Нурғәлиндәр. Нурғәленең Мөхәммәтәмин тигән улының вариҫтары күрһәтелмәгән, бәлки, юҡтыр.

Хәҙер Ҡыуаттың 3-сө улы Рәхмәтуллаға киләйек. Уның дүрт улы булған: Хәлит, Буранғол, Муллағол, Хәмит. Хәлиттең уландары: Ғөмәр, Йыһангилде, Ямалитдин, Мөхәммәтша һәм Ғәбит Рәхмәтуллиндар.

Йыһангилде, уның улы Сабит, Сабиттың улы Ғәлиәкбәр, Ямалитдиндың улы Муллагилде, уның улы Муллабай. Мөхәммәтшаның улы Шаһимарҙан. Рәхмәтулланың икенсе бер улы Хәмит Ҡыуатов, 1859 йылда 66 йәшлек ҡарт. Хәмиттең бер улы Хажморат, уның улы Солтанморат, Хәмиттең 2-се улы Мәғәз. Мәғәздең балалары: Ғәлиәкбәр, Хәлимә, Ғәбиҙә, Мәхтимә һәм Мәхмүзә. Рәхмәтулланың 3-сө улы Буранғол, 66 йәштә. Унан 3 улан: Ғәбделғазый, Ишҡазый, Мөхәммәтҡазый. Рәхмәтулланың 4-се улы Муллағол Ҡыуатов, 1859 йылда 53 йәштә. Рәхмәтулланың ейән, бүләләренең күбеһе ҡартаталарының исемен хуп күргән булһа кәрәк, Рәхмәтуллин фамилиялы кешеләр бөгөн дә йәшәй Вәлит ауылында. Ҡыуаттың 4-се улы Исҡаҡ Ҡыуатов, уның балалары Ҡыуатов фамилияһын йөрөткәндәр. Ҡыуаттың 5-се улы Аблай Ҡыуат улы Хәсәнов, 1851 йылда 69 йәшендә вафат. Аблайҙың уландары: Нурбулат, Ишбулат, Сөләймән һәм Усман. Уларҙың дүртәүһе лә Ҡыуатов йөрәгән. Күрәһең, уларҙың балалары, ейән-бүләләренең ҡайһы берҙәре Аблаев фамилияһын яҡыныраҡ күргәндәрҙер, сөнки ауылда шундай фамилиялы кешеләр ҙә йәшәй. Ҡыуаттың алтынсы улы Ирбулат Хәсәнов, 1850 йылда 61 йәшендә вафат. Уның ир балалары: Хасбулат, Йәнбулат, Бикбулат һәм Кинйәбулат. Ҡыуаттың өс улы атаһының исемен, ә икәүһе ҡартатаһының исемен фамилия итеп алған. Күрәһегеҙ, 1859 йылда Вәлит ауылында Ҡыуат Хәсәновтың нәҫелдәре йәшәгән. Бында тағы ла Иҫәнгилдин фамилияһын осратырға мөмкин. Мәҫәлән, Фәхритдин Иҫәнғол улы Иҫәнгилдин, Баһауитдин, Ғәләүитдин, Абдулбаҡый Иҫәнгилдиндәр һ.б.

Иҫәнгилде Ҡыуаттың, бәлки, ҡустыһылыр. Уны дөрөҫләү өсөн Юлдыбайҙағы Түңгәүер ырыуы шәжәрәһен ҡарау ҙа етер ине, моғайын. Кем ул Ҡыуат Хәсәнов? Ҡайҙан? Вәлит ауылына әллә Ҡыуат нигеҙ һалғанмы? Улай булһа, ауыл ни өсөн Ҡыуат тип түгел, ә Вәлит тип аталған?

Ошо һорауҙарға яуап табыр өсөн авторға байтаҡ ҡына эҙләнергә, һорашырға, күп кенә әҙәбиәт аҡтарырға тура килде. Был ауыл тураһындағы мәҡәлә 90-сы йылдарҙа уҡ башланһа ла, материалдарҙың етешмәүе, шәжәрәнең булмауы оҙаҡ тотҡарланы. Бер ваҡыт ҡул да һелтәп ҡуйылғайны, ләкин осраҡлы ғына бер осрашыу уға

яңынан тотонорға дәртләндереп ебәрҙе.

1990-сы йылдар башында райондың Һултас һәм Кәрим ауылдарының шәжәрәһен эҙләп йөрөгән саҡ. Уны эҙләп Өфө, Сибай, Гай, Орск, Магнитогорск, Стәрлетамаҡ ҡалаларына барылды, боронғо Матрай районының байтаҡ ауылдарын мотоциклда йөрөп сығылды. Матрай районы ауылдарында булғанда миңә Юлдыбай ауылындағы йөҙйәшәр Ырысҡилде Шаһыбал улы Ишкилдинды күреп һөйләшергә кәңәш иттеләр. Ниһайәт, 1992 йылдың 16 апрелендә был данлыҡлы ҡартты таптым. Ауырып тороуына ҡарамаҫтан, минең менән бик ихлас һөйләште. Беҙҙең яҡты ла яҡшы белә булып сыҡты. Миңә: «Мәмбәттәге теге Хәмзә хорунжийҙың ейәне булаһың икән. Хәмзә хорунжийҙың ҡатыны Зөләйха беҙгә апай тейешле, ул Олоһаҙ ауылынан, Ҡаҙаҡҡоловтар араһынан. Беҙ Хәмзә ҡартты еҙнәй ти торғайныҡ», — тине. Уның менән бик ихлас, оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Кәрим, Һултас ауылы кешеләрен яттан белә, шәжәрәһен һөйләп бирҙе. Бына ошо олатайҙан тәүге тапҡыр Вәлит ауылының Һаҡмар буйындағы Ҡыуаттан айырылып сығыуын, элек Вәлит ерҙәре Ҡыуат ауылы кешеләренең йәйләүе булыуын ишетеп хайран ҡалдым. Әллә ҡайҙағы, Һаҡмар буйындағы Ҡыуат кешеләренең был яҡҡа, ҡола яланға килеп ауыл һалыуҙары ул саҡта минең аҡылыма һыймай ине. Вәлит ауылы кешеләренең шәжәрәһен, Кәрим һәм Һултас ауылдарын әйткән һымаҡ, әйтә алманы. Уларҙың шәжәрәһен Юлдыбайҙан кемдер берәү алған да әле һаман кире алып килмәгән икән.

Ошонан һуң Өфө, Ырымбур архивтарында һаҡланған Вәлиткә ҡағылған кәрәкле ҡағыҙҙарҙы табып алыу бәхетенә ирешелде. Яйлап-яйлап Ҡыуат тураһындағы мәғлүмәттәр ҙә табыла торҙо. Ҡыуат тураһындағы бик һаран мәғлүмәтте 1975 йылда сыҡҡан «Крестьянская война 1773-1775 гг. на территории Башкирии. Сборник документов» тигән китаптың 412-се битендә табырға мөмкин. Баҡтиһәң, Ҡыуат Хәсәнов Түңгәүер улусы старшинаһы, хәҙерге Ҡыуат ауылы кешеһе. Ул ауыл Һаҡмар буйында ултыра, Баймаҡ районына ҡарай. Ҡыуат — баш күтәреүсе. Ҡазан Йәшерен комиссияһында тотолған. 1775 йылдың 15 ғинуарында иреккә сығарылған. (Ҡара: «Башҡортостан» гәзите. Салауат Таймасов. «Башҡортостанда Пугачев ихтилалы». 1996 йыл, 25 октябрь, 207-се һан.).

«Боронғо Түңгәүер ауылы Ҡыуатҡа нигеҙ һалыусы булып сыҡты ул. Ҡыуат Хәсәнов 1773-1775 йылдарҙағы ихтилалда бик актив ҡатнаша. Ул Пугачев полковнигы. Үҙенең ғәскәре менән дошманды ҡыйратып йөрөй. Тик әлегә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның шәхесе тейешенсә баһа алғаны юҡ», — тип яҙа Түңгәүер ырыуы егете, журналисты Сәлмән Ярмуллин («Башҡортостан». 1997 йыл, 1 октябрь, 189-сы һан). Был мөһим мәғлүмәттәр табылғанса уҡ Вәлит ауылындағы ҡайһы бер кешеләрҙең генеалогик схемаһын үҙаллы төҙөй башлағайным. Ҡыуат Хәсәновҡа килеп еттем дә туҡталып ҡалдым. Ҡыуаттың тамыры Таштуғай шәжәрәһендә юҡ, түңгәүерҙәрҙең оло шәжәрәһендә булырға тейештер, моғайын. Юлдыбайға кемеһенә барырға икән, тип йөрөгәндә, Сәлмән ҡусты ярҙамға килде. Ул «Башҡортостан» (1997 йыл, 1 октябрь, 189-се һан) гәзитендәге «Ғатаулла ишан» тигән мәҡәләһендә Ғатаулла ишандың шәжәрәһен бирә. Бына ул: Аҡкейек—Түңгәүер—Ҡара Төлкө—Күстәнә (бында Күстәнәнең атаһы Иламан төшөп ҡалған булһа кәрәк. Таштуғай шәжәрәһендә Хаҡколойҙың (Ҡара Төлкө) өс улы булған тип күрһәтелә: Мөлкаман, Юламан, Иламан. Ә Иламандың улы Күстәнә — Туҡһары (Күстәнә улы —*Р.Р.*) — Дәүләтсура—Төйән—Һөйөндөк—Хәсән—Ҡыуат—Ирғәле—Әлебай—Ғәбделмалик—Ғатаулла (1836-1914) —Ҡыямитдин—Зәйнулла һ.б. Мәшһүр Ғатаулла ишандың шәжәрә ебе Вәлиттәге ҡалғандарҙың да генеалогик схемаһын төҙөүгә ҙур таяныс буласаҡ, ошоға нигеҙләнеп ауыл шәжәрәһен дә төҙөү мөмкин буласаҡ. Бына шулай итеп, Ҡыуат Хәсәнов та, Ғатаулла ишан да мәшһүр заттан булып сыҡтылар.

1775 йылда Ҡазан Йәшерен комиссияһы тарафынан иреккә сығарылғас, Ҡыуат, әлбиттә, үҙ ауылына ҡайтҡан, ләкин Түңгәүер улусының старшинаһы булып түгел инде. Ҡайтыуына ул изге урын икенсе кеше ҡулында булған. Кем белә, ихтилалдан һуң Әбей батшаға ҡаршы ҡул күтәргән кешегә иғтибар ҙа булмағандыр, бәлки. Ҡыҫырыҡлауға ла дусар ителгәндер. Нисек кенә булмаһын, Ҡыуат үҙенең уландары менән йәйләүгә «Айғыр Атҡан» йылғаһы буйына киткән. Уның

уландары, ейән-бүләләре яйлап-яйлап һутлы үләнле ялан яғында нығына барған. Үрҙәге һөйләгәндәрҙән шул аңлашыла: Урал йылғаһы буйындағы Рәсәй границаһы 1840-сы йылдарҙа Арал диңгеҙенә ҡарай шылдырылғас, хәҙерге урынына ултыраҡ Вәлит ауылы һалына, башлап йөрөүсенең исеме бирелә ауылға. Ә йәйләү 1895 йылдан да алда барлыҡҡа килгән булһа кәрәк. Бөтә Ҡыуатовтар Вәлиткә күсеп китеп бөткәс, Ҡыуат ауылында Ҡыуатов фамилиялы кешеләр ҡалмаған. Ҡыуат ауылы кешеләренең һөйләүҙәренә ҡарағанда, хәҙер унда Солтанғоловтар, Түләковтар, Сыбарғоловтар һ.б. йәшәй икән. Мәшһүр Ғатаулла Ғәбделмалик улы Әлибаев-Маликов (1836-1914) тураһында Рәшит Шәкүр («Башҡортостан», 1995 йыл, 8-9 сентябрь) һәм Сәлмән Ярмуллин («Башҡортостан». 1997 йыл, 10 октябрь) яҙып сыҡтылар.

Ғатаулла ишандың да балалары ишле булған. Мәнәүәрә исемле тәүге ҡатынынан Абдулла, Ғаязитдин, Имамитдин (1891-1934), Баһауитдин тигән уландары, Фатима, Зөбәйҙә һәм Әсмә исемле ҡыҙҙары булған. Мәнәүәрә — заманында Ырымбур губернаһына киң билдәле башҡорт ғәскәрҙәре майоры, 3-сө класлы чиновник, потомственный дворянин Исәнғол Кәиповтың Әхмәтязарый тигән улының ҡыҙы. Әхмәтязарый ҙа хәрби кеше — хорунжий.

Ғатаулла ишандың һәм уның ағай-ҡустыларының балаларын 30-сы йылдарҙа, коллективизация заманында, «кулак» тип, төрмәгә ултыртып, һөргөнгә һөрөп, ҡайһыларын атып, ауылдан ҡыуып бөтөргәндәр. Хәҙерге көндә уларҙың нәҫеле үҙ тамырҙарын белмәҫлек хәлгә килтерелгән.

Ғатаулланың Мәнәүәрә инәйҙән тыуған эшһөйәр, уҡымышлы улы Имамитдин (1891) 1934 йылдың 17 мартында ҡулға алына, 58-2 статья менән 5 йылға иркенән мәхрүм ителә һәм төрмәгә оҙатыла, 1989 йылдың 9 июнендә генә аҡлана. Мәнәүәрә инәйҙең икенсе улы Борһанитдин Әлибаев та 1934 йылдың 17 мартында ҡулға алынып, 5 йылға төрмәгә оҙатыла, 1989 йылдың 2 майында аҡлана (Ҡара: «Книга Памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан». А-В. Том 1 — Уфа: Китап, 1997).

Ғатаулланың бер туған ҡустыһы Һибәтулланың улы Мөхәммәтрәхим дә был репрессиянан ситтә тороп ҡалмай. Мөхәммәтрәхим башҡорт халҡының оҙон көйлө йырҙарын оҫта башҡарыуы менән билдәле булған. Уның ҡатыны Хафиза инәй ҙә Мәмбәт ауылынан, данлыҡлы Кәиповтар тоҡомонан, Әхмәтязарыйҙың улы Хәмзә хорунжийҙың өлкән ҡыҙы. Бына ошо Мәхәммәтрәхим Әлибаев «кулак» яһалып, 1933 йылда ҡулға алына һәм 1937 йылға тиклем Алыҫ Көнсығышта тотконда була, төрмәнән ҡайтып 1943 йылға тиклем генә йәшәй. Уның улы Рәхимйән Әлибаев 1943 йылда Ватан һуғышы яланында ятып ҡала. Мөхәммәтрәхимдән Ғәлиә, Нурия, Хәҙисә тигән ҡыҙҙары ҡала, шуларҙан хәҙер Нурия Сөләймәнова апай ғына иҫәнһау, уның улы — Юлай Сөләймәнов.

Ғатаулла ишандың Ғаязитдин тигән улы ла репрессия ҡорбаны. Бынарҙан тыш, Әлибаевтарҙан Бүләк Йәҙеһәр улы Әлибаев (1891—1931) Ғәләүитдин Шәрәфитдин улы (1876—1931), Ғилман Ғәләүитдин улы (1905—1931) һ.б. репрессия ҡорбандары. Улар ҙа Ғатаулла ишандың ағайҙарының йәки ҡустыларының балалары. Был Ғатаулла ишандың тоҡомон төбөтамыры менән ҡоротоорға тырышыу тигәнде аңлата. Вәлит ауылынан репрессия тамуғына эләгеүселәр бер былар ғына түгел, улар күптәр.

Вәлиттең ултыраҡ ауылдар исемлегенә 1850 йылда ингәнлеге тураһында алда һүҙ булғайны инде. 1859 йылда ул Ырымбур губернаһы, Ырымбур өйәҙе, 4-се башҡорт кантонының 6-сы йортона ҡараған, унда 50 хужалыҡта 143 ир-ат, 150 ҡатын-ҡыҙ, барлығы 293 кеше йәшәгән. 1866 йылда 49 хужалыҡта 303 кеше; 1897 йылда ла халыҡ һаны күпләп артмаған. Ә бына 1917 йылда инде ауыл ҙурая төшкән, унда 81 хужалыҡта 389 кеше донъя көткән. Ауылдың ҙурайған осоро ошо дәүергә ҡайтып ҡала. Бынан һуң ауылдағы йорттар һаны ла, кешеләр һаны ла яйлап кәмей барған. Мәҫәлән, 1989 йылғы иҫәп буйынса, 69 хужалыҡта 234 кеше йәшәгән.